МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

# Ата-әсәләр өсөн консультация:

# "Телмәр үҫешендә музыканың роле"

Музыка етәксеһе:
Ҡунакбаева Г.Р.

**Телмәр үҫешендә музыканың роле**

Балалар баҡсаһында алып барылған башҡа тәбиғи белем биреү эшмәкәрлектәре кеүек үк музыкаль эшмәкәрлек баланың кесе йәштән телмәре үҫешендә ҙур роль уйнай.

Йыр дәрестәре-ул төрлө уй-фекерҙәр теле тип әйтһәк тә яңғылыш булмай. Сөнки бала йырҙы, көйҙө тыңлағанда үҙенсә уйлана, шатлана, үҙ алдында образдар тыуҙыра һәм шул образдарға оҡшарға тырышып ҡылана. Мәҫәлән,йыр матур аҡыллы ҡурсаҡ тураһында икән, бала шул ҡурсаҡҡа оҡшап һөйләшә,уның ҡыланыштарын үҙ итә. Кескәй төркөмдәрҙә музыка етәксеһе йырға анализды үҙе яһаһа, ә инде өлкән төркөмдәрҙә бала тыңлаған йырға йә көйгә анализды (уның нимә тураһында икәнлеген,характерын) үҙе әйтә. Һәм инде өлкән төркөм балалары ишетелгән произведениеға оҡшатып үҙҙәре менән булған хәл-ваҡиғаны һөйләйҙәр. Ошоноң менән баланың һүҙлек запасы арта, фекерләү ҡеүәһе үҫешә һәм иң мөһиме баланың бәйләнешле телмәре үҫешә. Йырҙы өйрәнгәндә инде баланың өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше, дикцияһы дөрөҫ формалаша. Педагог менән берлектә бала үҙенә ауыр булған һөйләмдәрҙе ҡабатлап әйтә, таныш булмаған һүҙҙәр менән таныша. Кескәй төркөмдәрҙә генә түгел өлкән төркөмдәрҙә лә бала йырлаған да һүҙҙең аҙағын дөрөҫ әйтмәй,шуға педагог улар менән берлектә ошо һүҙҙәр өҫтөндә эшләй, аңлата. Мәҫәлән:“Мин әсәйҙе яратам” - тип әйтеү урынына, бала һүҙҙең аҙағын әйтеп бөтөрмәйенсә, мин әсәйҙе ярата тип йырлай.Музыкаль эшмәкәрлектә тағы ла театр эшмәкәрлеге ҙур роль ала. Сөнки, бала театр эшмәкәрлегендә бөтә талантларын асып һала ала,ул йырлай, бейей һәм инде баланың телмәре үҫешә. Шуның өсөн дә берәй әҫәрҙе өйрәнгәндә тәрбиәсе йә булмаһа музыка етәксеһе баланың эмоция һәм хәрәкәттәренә генә иғтибар итмәй иң беренсе телмәренә иғтибар бүлә,һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешенә иғтибар итә. Ә тағыла баланың телмәре үҫешендә ишетеү һәләте лә роль уйнай. Ишетеү һәләте үҫешеп еткән бала өндәрҙе дөрөҫ ҡабул итә, һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтә.